БАШҠОРТОСТАН МЕДИЦИНА ПРОФИЛАКТИКАҺЫ ҮҘӘГЕ
РЕСПУБЛИКА ТИРЕ-ВЕНЕРОЛОГИЯ ДИСПАНСЕРЫ

# Үҫмерҙәргә:
# енси юл аша йоғоусан сирҙәрҙе булдырмау саралары

**Йәштәр өсөн иҫкәрмә ҡағыҙы**

ӨФӨ – 2006

**Енси мөнәсәбәткә ингәндә йоға торған тереклек төрҙәре күп, улар: паразит бөжәктәр, ябай заттар, кескәй бәшмәктәр, бактериялар, вирустар. Бындай сирҙәрҙең һаны 30-ға яҡын иҫәпләнә.** Уларҙың күбеһе кешенең енси функцияһына зарарлыҡ килтерә, кешенең ата йәиһә әсә булыу мөмкинлеген сикләй. Түлһеҙлек, эске ағзаларҙың зарарланыуы, ҡарында баланың үлеүе, баланың тыумыштан сирле булып тыуыуы – енси юл аша йоға торған сирҙәрҙең һөҙөмтәһе. Енси юл аша йоҡҡан ҡайһы берҙәре, ваҡытында дауаламағанда, инвалидлыҡҡа килтерә.

**Был сирҙәр тәртипһеҙ енси тормош алып барған кешеләрҙә туплана.** Күп ваҡыт был сирҙәрҙең тышҡы билдәләре һиҙелмәй, кеше үҙенең ауырығанын да белмәүе мөмкин. Тышҡы ҡиәфәткә генә ҡарап, социаль йөҙгә иғтибар биреп кенә был сирҙәрҙе танып булмай.

**Никах теркәп кенә өйләнешеү, шикһеҙ, күп фажиғәләрҙән ҡотҡара.** Әммә йәмғиәттә тәмәке, араҡы, наркотиктар менән йәнәшә енси боҙоҡлоҡ та йөрөй. Мөмкин булған хәтлем, сәләмәт юлға баҫтырырға тырышып, беҙ барыһына ла өгөт-нәсихәттәребеҙҙе еткерәбеҙ.

**Әйтеүебеҙсә, был сирҙәрҙән һаҡланыуҙың төп сараһы – енси мөнәсәбәттә бер партнерлыҡ.**

Ата-әсә булыу өсөн яҡынлыҡ ҡылынмағанда, даими рәүештә презерватив ҡулланыу ыңғай нәтижә бирә. Презервативтың размеры һәм һаҡланыу ваҡыты иҫкә алыныуы ла шарт. Презерватив ҡына һаҡлай тип, уны рекламалау аҫылда дөрөҫ түгел. Шулай ҙа, барыбер презервативты ғына булһа ла ҡулланыу кәрәк – ул күп венерик ауырыуҙарҙан һаҡлай, шул иҫәптән СПИД тип йөрөтөлгән сирҙән дә. Бетлелек һәм ҡорсаңғы өсөн презерватив бар ни юҡ ни, тән тәнгә тейһә, паразит күсә лә үрсей башлай. Ә сифилис үбешкәндә лә йоғоуы мөмкин, тиреләге сифилис йәрәхәтендә был сирҙең микробтары бик күп була.

Енси бәйләнеш ҡапҡанына эләгеп, презерватив ҡулланып өлгөрә алмағанда, тулы өмөтһөҙләккә бирелмәйенсә генә бот араларын, енси ағзаларҙы һабынлап йыуырға кәрәк. Унан, кибенгәс, енес ағзаларын 0,001 % мирамистин иретмәһе менән эшкәртергә тәҡдим ителә. Эшкәртеү өсөн башҡа дарыуҙар ҙа бар: гибитан, цидипол, хлоргексидин һ. б. Был сараларҙы енси бәйләнештән һуң 2–3 сәғ. эсендә үтәп өлгөрөү мәслихәт. Был процедураны медик башҡарһа бигерәк тә яҡшы.

Партнерҙың сирле икәнлеге билдәле булһа, йоҡҡан сир ҡалҡып сыҡҡансы алдан дарыуҙар ҡулланыу бар. Бынnetwork инде фәҡәт табиб билдәләргә тейеш.

Тимәк, бер сара ла тулы гарантия бирмәй, ләкин йоҡтормауҙы 99,9 %-ҡа яҡынлаштыра ғына. Ҡул һелтәп, бер нисек тә һаҡланмайынса торорға ярамай.

Сир билдәләре булһа, уларҙың йәйелгәнен көтөп торорға кәрәкмәй. Иртәме, һуңмы, барыбер дерматовенрологка күренергә тура киләсәк. Врачтар енси боҙоҡлоҡ менән көрәшһә лә, сирләгәндәрҙе тоткарһыҙ ҡабул итә. Сирҙе башынан асыҡлап дауалағанда, күп яҡшы нәтижәләргә ирешеп була. Дауалауы ла йылдарға һуҙылмай, дарыуҙар ҙа аҙыраҡ корок, – пациентка ла файҙа, хөкөмәткә лә, табибҡа ла еңелерәккә төшә.

Был сирҙәрҙең ҡайһыбер билдәләрен әйтеп китеү кәрәк.

1. Бетлелек, ҡорсанғы енси бәйләнеш ваҡытында йоға ҡалһа, башҡа сирҙәрҙән дә тикшеренеү талап ителә, сөнки күп осраҡта бер генә ауырыу түгел, бернисәһе бер юлы йоға.
2. Эс йәиһә ҡорһаҡтың аҫҡы өлөшө ауыртканда ла, енси юл аша йоҡҡан ауырыу булыуы мөмкин.
3. Енси ағза ауыртһа, әсетһә, ҡысытһа дерматолоґҡа тиҙҙән күренеү мотлаҡ. Ә инде ауыртмайынса ҡыҙарып ҡына торһа, эренләһә, бетсәләһә, йәрәхәт хасил булһа, үҙе бөтә тиергә кәрәкмәй. Сифилис йәрәхәте ҡайһы осраҡта үҙе лә бөтә, ауыртмай ҙа, ә сифилис ауырыуы дауаламайынса бөтмәй. Кешене иртә дарыулай башламағанда,сир тағы ла яманыраҡ төҫ ала. Йәрәхәт төҙәлеү әле ул сир бөтөү түгел.
4. Енси ағзаларҙан сит-ят шыйыҡса бүленеп сығыуы ла сир билдәһе.

5. Һейҙек тә бәүел юлдарынан әсеттереп, ауырттырып сығырға тейеш түгел.

Теҙеп әйтелгән билдәләр енси юл аша ғына йоҡҡан сир икәнлеген күрһәтмәй. Ваҡытында дөрөҫ диагноз ҡуйыу өсөн, башка сирҙәргә ҡағылғанда ла беҙ тиҙҙән: "Табибҡа күренегеҙ!" – тип әйтер инек.

**Дерматовенерологтар енси мөнәсәбәт һеҙҙең шәхси сер икәнлеген аңлай. Ҡурыҡмайынса, беҙгә ваҡытында килегеҙ! Медицинала сер асылмаһын өсөн бөтә саралар ҙа ҡарала. Бөтөнләй билдәһеҙ булып ҡалырға теләһәгеҙ, аноним тикшеренеү ҙә ҡаралған. Беҙ, бары тик һеҙҙең сәләмәт булыуығыҙҙы теләйбеҙ. Һеҙ сәләмәт булһағыҙ, башкаларға сир йоҡмаясаҡ, ата һәм әсә бәхетенә ирешәсәкһегеҙ, балаларығыҙҙың сәләмәт булып тыуыуына ла өмөт бар.**

Ҡуйын дәфтәренә:

Бөгөнгө көндә дерматовенерологтар һәр районда һәм һәр ҡалала бар. Республика тире-венерология диспансеры Өфөлә өс урында ҡабул итә:

1. Затон биҫтәһе, Союзная урамы, 37; "Кадеттар корпусы" тукталышы; тел. – 2-87-12-53;
2. Революцион урам, 58, түләүле хеҙмәтләндерә торған поликлиника; "Үҙәк баҙар" тукталышы; тел. 2 72-56-06;
3. Индустриаль шоссе, 42-44; "ЙӘЙҒОР баҙары" (298 маршрут), "Азатлыҡ ур.", "Ит комбинаты" туҡталыштары; тел. 2 42-38-51.

Республика тире-венерология диспансеры
Дерматовенерологтар:
Тухватуллина Ф. З.
Султанова З. З.
Хайдаров М. М.

РИО ГУЗ БЦМП, з. 72 т. 1000 экз., 2006г.